Государственное бюджетное общеобразовательное учреждение
Стерлибашевская коррекционная школа-интернат для обучающихся
с ограниченными возможностями здоровья

| Рассмотрено на заседании ШМО старшего звена | Согласовано | Утверждаю |
|---|---|---|
| Протокол № 5 от «29» мая 2018 г. | Заместитель директора по УР | Директор |
| Руководитель Каримова АА. | Гайнуллина Д.Р. | Афанасьев А.А. |
| | «31» 08 2018 г. | «3» 09 2018 г. |

# Рабочая программа по башкирскому (государственному)языку для 7 класса

**Срок реализации программы 1 год**

**учитель**

**Хуснетдинова Ф.С.**

2018-2019 учебный год

Аңлатма яҙыу

Һаулығы буйынса мөмкинселеге сикләнгән уҡыусыларҙың 7-се класы өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.

Эш программаһы В.В.Воронкованың VIII-се төрҙәге махсус(коррекция) дөйөм белем биреү һәм АООП Стәрлебаш һаулығы буйынса мөмкинселеге сикле уҡыусыларҙың махсус (коррекция) дөйөм белем биреү программаһына нигеҙләнеп төҙөлгән.

**Дәреслек:** Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-се синыф уҡыусылары өсөн дәреслек. Усманова М.Ғ. – Өфө: Китап, 2012й.

**Программа кимәле** : базис.

**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты** :

1. Башҡорт теленән программа. (Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн). Төҙөүселәре: Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.
2. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2009.
3. Уҡытыу урыҫтелендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-8-се кластары өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2006.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты**:

Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-се синыф уҡыусылары өсөн дәреслек. Усманова М.Ғ. – Өфө: Китап, 2008.

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:** Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З.М., Усманова М.Г. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

Башҡортостан

Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Туҡбирҙе төп дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:**

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.

**Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән:**

1. Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеү үҙәк бурыс.
2. Тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
3. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығыпөйрәнелә (коммуникативйүнәлеш).

**Маҡсаттарһәмбурыстар:**

- Уҡыусыларҙа башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радиотапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование).
- Аралашыуҙа кәрәк булла торған типик һөйләмдәрҙе күсереп, үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙаллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу.

- Башҡорт телен өйҙә, йәмәғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү.
- Башҡорт телен практик өйрәнеүгә бәйләп, балаларҙы башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, мили йолалары, башҡорт халҡының күренекле шәхестәре, уларҙың эшмәкәрлеге, ижады һәм башҡалар менән таныштырыу, балаларҙыбашҡорт донъяһына алып инеү, , үҙҙәре йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү. Текстағы яңы һүҙҙәр, фразаларҙы аңлатыу, һүҙлек эше үткәреү мотлаҡ.
- Әҫәрҙе өлөшләп, һайлап, ролдәргәбүлеп, сылбыр буйынса уҡыу, тексты магнитофон яҙмаһынан тыңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү кеүек эштәрбашҡарғанда, һүҙлек эше иғтибар үҙәгендә тора.
- 5-6-сы кластарҙа алған белемдәр тулыландырыла. Темалар буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңытекстар уҡыу, диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә.
- Туған тел, белем, уҡытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлыҡ тураһында һөйләшеү күберәк урын ала.
- Бәйләнешле текст төҙөү, бертелдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башҡарыла.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

**Яңынан мәктәпкә (4 сәғәт)**

5-6- сы кластарҙа алған белемдәрен тулыландырыу. Был тема буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу. Диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итеү. Мәктәп, уҡыу, китап, икмәк тураһында мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар менән танышыу.

**Ауыл тормошо (2 сәғәт)**

Ауыл тормошо, уыл кешеләренең кҡнкүреше, хеҙмәт, игенсе хеҙмәте тураһында әңгәмәләр үткәреү. Игенсе эшенең нескәлектәрен һөйләү. Ауыл тормошоноң ҡала тормошонан айырмалы яҡтары тураһында аңлатыу. Ауыл еренән сыҡҡан күренекле шәхестәр менән танышыу.

**Башҡортостан буйлап сәйәхәт. (6 сәғәт)**

Был тема буйынса яңы мәғлүмәттәр биреү. Тыуған еребеҙҙең сал тарихы барлығын, башҡортостан тураҙында рус яҙыусылары, «Урал» эпосы, һуңғы йылдарҙағы тарихи Башҡортостан ерендә үткәрелгән фәнни экпедициялар мәғлүмәттәре менән танышып китеү. Яңғыҙлыҡ исемдәр менән таныштырыу.

**Спорт. Спорт кәрәк – яраҡтары. (3 сәғәт)**

Кешегә сәләмәт булыу өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икәнлеген аңлатыу һәм был тәрала уҡыусылар менән һөйләшеү, әңгәмә ойоштороу. Уҡыусылар үҙҙәре спорт менән ҡыҙыҡһыныуҙары, күренекле спортсмендар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Спорт тураһында теле –радио тапшырыуҙары, газета материалдары буйынса һөйләү.

**Мин һәм беҙҙең ғаилә. (5 сәғәт)**

Уҡыусы үҙенең ғаиләһе тураһында тулы һәм иркен һөйләй белергә тейеш. Сөнки был тема йылдан – йыл ҡабатлана. Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атау, уларға ихтирамлы, иғтибарлы булырға өйрәтеү. Ғаилә, ғаилә ағзалары тураһында яҙылған әҫәрҙәрҙе уҡыу, уларҙы аңлы ҡабул итергә өйрәтеү, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү.

**Әсәйҙәр байрамы. (2 сәғәт)**

Әсәй, өләсәйҙәрҙең изгелеге, ҡәҙере хаҡында әҫәрҙәр уҡыу, йөкмәткеһе өҫтөндә эш төрҙәре башҡарыу, һүҙлек байлыҡтарын арттарыу. Ҡатын – ҡыҙҙар байрамы тураһында әңгәмәләр, иртәлектәр үткәреү, данлыҡлы ҡатын – ҡыҙҙар менән осрашыуҙар ойоштороу.

**Сәнғәт оҫталары (2 сәғәт)**

Республиканың данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре менән танышыуҙы дауам итеү. Сәнғәт оҙталарының тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу. Теле – радио тапшырыуҙар,

яҙмалар ҡарау. Уларҙың әҫәрҙәрен таныу, данлыҡлы кешеләребеҙ тураһында һөйләй белеү. Йырҙар өйрәтеү, бергәләп йырлау, һәләтле балалар менән йырҙар өйрәнеү. Мәктәп сәхнәһе өсөн концерт номерҙары әҙерләү.
**Исемең матур, кемдәр ҡушҡан? Исемдәрҙә – ил тарихы (3 сәғәт )**
Был тема кеше исемдәренән башҡа тау, ер, һыу атамалары менән берлектә алып барыла. Исемдәрҙең мәғәнәһе, уның кеше менән берлектә алып барыла. Исемдәрҙең мәғәнәһе, уның кеше холоҡ – фиғеленә тәьҫир итеүе. Данлыҡлы кешеләрҙең исемдәренә бәйләп, төрлө тарихи ваҡиғалар һөйләү, әҫәрҙәр уҡыу. Атамалар буйынса легендалар, риүәйәттәр уҡыу ҙа дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп үткәрергә ярҙам итәсәк.
**Борон – борон заманда… (1 сәғәт)**
Башҡорт халыҡ ижады темаһын киңәйтеү, уҡыусыларҙың белгәндәрен тулыландырыу, һүҙ байлығын, һөйләү телмәрен үҫтереү маҡсат булып тора.Күберәк иғтибарҙы тексты аңла ҡабул итеү һәм йөкмәткеһен һөйләй белеүгә йүнәлтеү.
**Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ (2 сәғәт)**
Иң төп темаларҙың береһе – берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ. Бында тик кешеләр араһындвғы дуҫлыҡ тураһында ғына һөйләшеү бармаясаҡ, ә халыҡ – ара булған мөнәсәбәттәр ҙә иғтибар үҙәгендә торорға тейеш. Был тема буйынса уҡыусыларҙы аңлап фекер йөрөтөргә һәм һөйләй белергә өйрәтеү.
**Йәмле йәй (4 сәғәт)**
Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәренең билдәләү. Уғыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу. Был айҙарҙа уҙғарылған Милли байрамдар менән таныштырыу, улар тураһында белгәндәрен һөйләү.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

**7 класс өсөн телмәр күнекмәләре:**

- Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен белеү;
- Яҙыусыижадиткәнхудожестволыкартиналарҙыуйлапкүҙалдынабаҫтырыу;
- Эпик һәм лирик әҫәрҙеайырабелеү;
- Художестволы, фәнни популяр һәм публицистик текстарҙы ҡысҡырып, етеҙ уҡыу;
- Художестволыәҫәрҙәрҙетасуириуҡыу;
- Ҙур булмаған хикәйәләрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү.
- Йәмғиәттормошондателдең роле; туған телдең әһәмиәте;
- Фонетика, телмәрөндәре, ижек, баҫым, һуҙынҡыһәм тартынҡы өндәр;
- Графика, алфавит; хәрефтәрҙең өндәрҙе сағылдырыуы төшөнсәләре;
- Лексика; һүҙҙеңлексикмәғәнәһе; һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе; синоним, антоним, омоним;
- Исемдәрҙеңһан, килешменәнүҙгәреше, күплекһәмкилешялғауҙарыныңдөрөҫяҙылышы, яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы;
- Ҡылымдарҙыңзаман, һан, затменән үҙгәреше;
- Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре, уларҙыңяҙылышы, һөйләмдәге роле

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

**Баһалар нигеҙҙә уҡыусыларҙы башкорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу дәртләндереү маҡсаты менән ҡуйыла.**

“5” билдәһе ҡуйыла: әгәр уҡыусы һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡыһа,паузаларға иғтибар итһә,һорауҙарға тулы яуап бирһә уҡылған текстың йөкмәткеһентулы итеп һөйләп бирһә

"4" билдәһе ҡуйыла: әгәр уҡыусы ижекләп уҡыһа,уҡығанда 1-2 хата ебәрһә,текстың йөкмәткеһен тулыитеп һөйләмәһә,шиғырҙарҙы уҡытыусы ярҙамында һөйләһә.

"3"-билдәһе әгәруҡыусы ауыр һүҙҙәрҙе ижекләп тәу уҡый алмаһа. Паузаларҙы дөрөҫ ҡулланмаһа. Текстың йөкмәткеһен уҡытыусы ярҙамында һөйләһә .

**Яҙма эштәрҙе баһалау**

Контроль эштәр: контроль диктанттан һәм контроль күсереп яҙыуҙан тора. Шулай уҡ грамматик эштәр тәҡдим ителә.
Диктанттар күләме:
**Диктанттар**
"5"- әгәр эш бер хатаһыҙ эшләнһә
"4"-1-3 хата
"3"-4-5 хата
**Грамматик эштәр**
"5"-әгәр эштәр бер хатаһыҙ эшләнһә
"4"-3/4 эш дөрөҫ эшләнһә
"3"-1/2 эш дөрөҫ эшләнһә
**Контроль күсереп яҙыу**
"5"-хатаһыҙ дөрөҫ яҙылһа
"4"-бер хата һәм бер төҙәтеү
"3"- ике хата һәм бер төҙәтеү

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.
Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәгеәҙәбитекстарғапландартөҙөү;
- телһәмәҙәбиматериалдарбуйынса аналитик һәмдөйөмләштереүтибындағысхемалар, проекттартөҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыуйылыбашында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белеем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотошдәресте, йә уның берөлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башындаинеү диктанты, сирек һәм йылаҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсекөнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙмаэштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәгекүләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

**Башҡорт (дәүләт) телен өйрәнеү өсөн уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар**

1. Башҡорт теленән программа. (Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн). Төҙөүселәре: Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

2. Башҡорттеленәндиктанттарһәмизложениеларйыйынтығы. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2009.
3. Уҡытыуурыҫтелендәалыпбарылғанмәктәптәрҙең 7-8-се кластары өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2006.
4. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. Башҡорттелендәүләт теле итеп өйрәнеүселәр өсөн. – Өфө: Китап, 2009. – 128 бит.
5. Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.
6. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәрүҫтереүбуйынсасюжетлыкартиналар.- Өфө:Китап, 1996.

**Материаль-техник ҡулланмалар**

- компьютер;
- интерактив таҡта

**Төп һәм өҫтәлмә әҙәбиәт**

1. Башҡорт теле: Уҡытыуурыҫтелендәалыпбарылғанмәктәптәрҙең 7-се синыфуҡыусыларыөсөндәреслек. Усманова М.Ғ. һ.б. – Өфө: Китап, 2008
2. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
3. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
4. Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.
5. Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
6. Балаларуйын фольклоры. Сөләймәнов А.М. – Өфө, Китап, 2007.
7. Балаларөсөнйөҙйыр. Юнысова Г.А. – Өфө, Китап, 2003
8. «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Йәншишмә», «Аҡбуҙат», «Аманат», «Йәшлек» гәзит-журналдары.

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре:**

Диктант- 2

Диктанттар күләме: 65-70 һүҙ Һүҙлек диктанты :18-20 һүҙ

Календарь-тематик планлаштырыу 7-се синыф

Программа буйынса: 34 сәғ

План буйынса: 32 сәғ

| № | | Тема | План. дата | Факт. дата | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | **1. Яңынан мәктәпкә.** | | | |
| 1. | 1.1 | 1 сентябрь-Белем көнө. 6 синыфта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Б.Бикбай “Туған тел”. | 06.09 | | |
| 2. | 1.2 | З.Биишева “Башҡорт теле”. Ҡылым төркөмсәләре. К.Кинйәбулатова “Көҙҙәр еткәс”. | 13.09 | | |
| 3. | 1.3 | Инеш диктант. “Башҡортостан- илем”. | 20.09 | | |
| 4. | 1.4 | Хаталар өҫтөндәэш.Ҡылым замандары.Уртаҡ ҡылым. | 27.09 | | |
| | | **2. Ауыл тормошо.** | | | |
| 5. | 2.1 | “Алтын башаҡтар”. Әкиәт. Уртаҡ ҡылым.Хеҙмәт,икмәк тураһында мәҡәлдәр. | 04.10 | | |
| 6. | 2.2 | “Ҡан ҡәрҙәш”. Башҡорт халыҡ әкиәте. Сифат ҡылым. | 18.10 | | |
| | | **3. Башкортостан буйлап сәйәхәт.** | | | |
| 7. | 3.1 | Т.Йосопов “Икмәк еҫе”.Ҡылым. | 25.10 | | |
| 8. | 3.2 | М.Кәрим “Башҡортостан”. Исем. | 08.11 | | |
| 9. | 3.3 | Башҡорт халыҡ йыры “Урал”. Янғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. | 15.11 | | |
| 10. | 3.4 | Р.Ғәрипов “Урал йөрәге”. Хәҙерге заман сифат ҡылым. | 22.11 | | |
| 11. | 3.5 | Арҡайым. Тәбиғәт һәйкәлдәре.Сифат ҡылым. “Мин Уралда йәшәйем”.Телмәр үҫтереү | 29.11 | | |
| 12. | 3.6 | Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр. Әйтелеү маҡсаты яғынан һөйләм төрҙәре. | 06.12 | | |
| | | **4.Спорт.Спорт кәрәк-ярактары.** | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 13. | 4.1 | Беҙҙен ғаилә-ярышта. Сифат ҡылым. Башҡортостанда спорт төрҙәре. Һүҙлек менән эш. | 13.12 | | |
| 14. | 4.2 | Башҡортостан ҡалаларында спорт. Һөйләм. “Аҡбуҙат” ипподромы. Һандар. | 20.12 | | |
| 15. | 4.3 | “Аҡбуҙат” ипподромы. Һандар. | 27.12 | | |
| | | **5. Мин һәм беҙҙен ғаилә.** | | | |
| 16. | 5.1 | Ғ.Рамазанов “Яңы йыл менән!” Ҡылым. Ҡышты кем нисек үткәрә? | 17.12 | | |
| 17. | 5.2 | К.Шафиҡова “Әсәй күҙҙәре”.Сифат. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. В.Сидоров “Салауаттын туғандары”. | 24.01 | | |
| 18. | 5.3 | “Ҡошҡа әйләнгән әбей”.Башҡорт халыҡ әкиәте. Ҡылымдын заты,һаны,заманы. | 31.01 | | |
| 19. | 5.4 | Беҙҙен ғаилә. Хәл ҡылым.Шәжәрә. | 07.02 | | |
| 20. | 5.5 | Ф.Исмәғиловтын “Йылға буйында” картинаһы.Телмәр үҫтереү. | 14.02 | | |
| | | **6.Әсәй,әсәкәйем…** | | | |
| 21. | 6.1 | Ф.Рәхимғолова “Беҙҙен әсәй”. Теркәүестәр. Ғаилә тураһында мәҡәлдәр,әйтемдәр | 21.02 | | |
| 22. | 6.2 | З.Воскресенская “Әсә!”. Теҙеү теркәүестәре. “Етегән йондоҙ”.Әкиәт. Теркәүестәр. | 28.02 | | |
| | | **7. Сәнғәт оҫталары.** | | | |
| 23. | 7.1 | Х.Әхмәтов “Тыуған ауылым”. Эйәртеү теркәүестәре. Салауат Юлаев ижады. Теркәүестәр. | 07.03 | | |
| 24. | 7.2 | Р.Заһретдинов ижады. Теҙеү теркәүестәре. Рәшиҙә Туйсина. | 14.03 | | |
| | | **8. Исемең матур,кемдәр ҡушҡан?** | | | |
| 25. | 8.1 | Иемдәрҙә-ил тарихы. Бәйләүестәр. | 21.03 | | |
| 26. | 8.2 | Иемдәрҙә-ил тарихы. Башҡорт исемдәре. Бәйләүестәр. | 04.04 | | |
| 27. | 8.3 | Яҙ етте. Бәйләүестәр. А.Григорян “Апрель | 11.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | менән!”. | | | |
| | | **9. Борон-борон заманда…** | | | |
| 28. | 9.1 | “Ирәндек”.Башҡорт халыҡ йыры. Киҫәксә. Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?. Киҫәксә. | 18.04 | | |
| | | **10. Берҙәмлек,дуҫлыҡ,тыныслыҡ.** | | | |
| 29. | 10.1 | Контроль диктант “Йәй етә”. | 25.04 | | |
| 30. | 10.2 | Хаталар өҫтөндә эш.Р.Мөхәмәтов “Тауышһыҙ Талип”. Мөнәсәбәт һүҙҙәр. | 16.05 | | |
| | | **11.Йәмле йәй.** | | | |
| 31. | 10.3 | С.Әлибаев “Ҡайын һыуы”. Урман-ҙур байлыҡ. Һөйләмдә тыныш билдәләре. | 23.05 | | |
| 32. | 10.4 | 7-се синыфта үтелгән темалар буйынса йомғаҡлау дәресе. | 30.05 | | |

Прошнуровано и пронумеровано
9 (девять) листов
«___» ________ 201_ г.
Директор ________ А.А. Афанасьев

ГБОУ Стерлибашевская КШИ